TDD/JofEL • Summer/Winter • Volume 3, Issue 4-5, 2014

Әхәт Сәлихов
Ufa

# ӘХМӘТЗӘКИ ВӘЛИДИ ТУҒАН

# ТУЫТУЫНА 125 ЙЫЛ



Әхмәтзәки Вәлиди ғәрәп, төрки, рус телдәренең тәүге һабаҡтарын атаһы Әхмәтшаһ хәҙрәт тотҡан мәҙрәсәлә ала, әсәһе, Өммөлхаят абыстай, фарсы телен яҡшы белгән һәм улына ла өйрәткән. Артабан Ә. Вәлиди күренекле ғалим Шиһабетдин Мәржәниҙең шәкерте булып, олатаһы Хәбибназар Үтәкиҙең мәҙрәсәһендә уҡыуын дауам итә.

1908 йылда Әхмәтзәки Вәлиди Ҡазандың «Ҡасимиә» мәҙрәсәһендә уҡырға инә, тамамлағандан һуң, уны төрки халыҡтарының тарихы һәм ғәрәп әҙәбиәте мөғәллиме итеп ошо мәҙрәсәлә ҡалдырдылар.

Ә. Вәлидиҙең мәҡәләләре төрлө төрки телле ғәзит-журналдарҙа баҫыла. 1912 йылда уның «Төрк вә татар тарихы» исемле тәүге китабы сыға.

1913 – 1914 йылдарҙа ике мәртәбә Урта Азияға командировкаға бара. Сәйәхәттең һөҙөмтәләре булған мәҡәләләре төрки телле журналдарҙа һәм Рәсәй фәнни баҫмаларында донъя күрә.

1917 йылдың февраль ваҡиғаларынан һуң ул үҙен тулыһынса сәйәси көрәшкә арнай.

1923 йылдан алып Әхмәтзәки Вәлидиҙең сит илдәге тормошо һәм ғилми эшмәкәрлеге башлана. Ул ныҡышмалы рәүештә фән үрҙәрен яулауын дауам итә. Тарих буйынса бихисап сығанаҡтарға юлыға, уларға таянып мәҡәләләр яҙа, китаптар сығара, Вена университетын тамамлай һәм Ибн Фаҙландың «Сәйәхәтнамә»һен тикшереүгә бағышланған диссертацияһын яҡлай. Ә. Вәлиди эмиграцияла барлығы 300-ҙән ашыу хеҙмәт нәшер итә. Тормош юлында осраған ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығып, ул бөтә донъяға билдәле ғалим булып танылa.

Ә. Вәлиди Ибн Фаҙландың «Сәйәхәтнамә»һен табып баҫтыра, «Төрки халыҡтарының дөйөм тарихына инеш», «Уғыҙ дастаны», «Тарихта ысул», «Ҡөръән һәм төркиҙәр», «Хәҙерге Төркөстан һәм уның яңы тарихы» кеүек төркиәт фәне өсөн мөһим китаптар нәшер итә. Герберт Янски уның «Төрки халыҡтарының дөйөм тарихына инеш» китабын «йәш төркиәтселәргә юл күрһәтеүсе маяҡ» тип атай.

***

## Зәки Вәлиди-Бөйөк остазым

Ғабделҡадир Инан *Төрөксәнән Әхәт Сәлихов тәржемәһе*



“Зәки Вәлидиҙең «Төрөк вә татар тарихы» әҫәрен ятлағансы уҡып, уға тәрән хөрмәт һәм ихтирам хисе тойҙом. 1914 йылдың көҙөндә унан хат килде. Ҡиммәтле әҫәр авторының, хөрмәт күрһәтеп, хат яҙыуына бик ныҡ ҡыуандым. Хатында Зәки Вәлиди «Шура»ла (1914 йыл, №5) баҫылған «Башҡорт йәйләүендә» исемле хикәйәмдә бик оҡшатыуы хаҡында яҙған, башҡорт тарихына ҡағылышлы әҫәрҙәр уҡырға кәңәш иткән.

Зәкиҙән хат алғанға тиклем, Пермь губернияһы йыляҙмаһындағы башҡорт ихтилалдары тураһында яҙылған мәҡәләнән башҡа, башҡорт тарихына бәйле әҫәр уҡығаным юҡ ине. Күп йылдар үткәс кенә был мәҡәләнең Брокгауз-Эфрон энциклопедияһындағы «Башҡорттар» мәҡәләһенән алынып баҫылғанын белдем. Быларҙан тыш тик Пушкиндың «Капитан ҡыҙы» һәм «Пугачев ихтилалы» исемле әҫәрен уҡығайным. Башҡорт ихтилалдары хаҡында урыҫтар тарафынан йөҙәрләгән том тарихи документтар баҫылыуы хаҡында белмәй инем. Зәки Вәлидизең был хаты минең өсөн ҙур этәргес көс булды. Ул тәҡдим иткән китаптарҙы, Өфө, Екатеринбург, Силәбе һәм Троицк китапханаларынан эҙләп табып, уҡыным.

Зәки Вәлиди менән яҡындан танышыуым 1918 йылдың июнендә булды. Ул, чехословактар менән килешеп, башҡорт полктарын ҡороу менән мәшғул ине. Беҙ шул осорҙа «Башҡорт» гәзитен сығара башланыҡ, мин гәзиттең яуаплы сәркәтибе булдым.

Зәки Вәлиди беренсе һәм икенсе башҡорт полктарын ойоштороп, беҙҙең ауыл янындағы һуғышта ла ҡатнашты. Уның мәшһүр ғалим булған кеүек үк батыр, ҡаһарман яугир ҙа булыуын шул һуғышта ҡатнашҡан иптәштәренән ишеттем. 1922 йылда Сәмәрҡәнд янындағы алышта уның батырлығына үҙем шаһит булдым. «Хәтирәләр»ендә был һуғыш хаҡында яҙылған.

1919 йылдан алып З. Вәлиди Туған менән гел бергә булдым. Ул менең башҡорт милли хәрәкәтенең тарихын өйрәнеүемдә һәм дөйөм төрки мәҙәниәте өлкәһендә эшләүемдә теләне һәм был эштә һәр саҡ ярҙам итте. Зәки Вәлиди минең бөйөк остазым, ғәзиз дуҫым һәм кәңәшсем булды.”


BAŞKURDİSTAN
ZEKİ VELİDİ TOGAN




Әхмәтзәки
Вәлиди





## Kaynaklar

http://vk.com/wall-19410673?own=1

http://vk.com/wall-19410673?own=1&z=photo-70958470_353835424%2Fwall-19410673_327